МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерство образования и науки Республики Башкортостан
Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
Гимназия села Кушнаренково муниципального района
Кушнаренковский район Республики Башкортостан
МБОУ Гимназия с. Кушнаренково

РАССМОТРЕНО	СОГЛАСОВАНО	УТВЕРЖДЕНО
на заседании кафедры родных языков и литературы	Заместитель директора по УВР	Директор МБОУ Гимназия с. Кушнаренково
Протокол № 1	______________ Князева С.С.	______________ Асылов А.М.
от «22» августа 2023 г.	Протокол № 1 от «23» августа 2023 г.	Приказ № 275-од от «24» августа 2023 г.

РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

учебного предмета
«Государственный (башкирский) язык Республики Башкортостан»
для 10-11 классов среднего общего образования

Кушнаренково 2023

1.Аңлатма яҙыу

1.1. Дөйөм белем биреү ойошмаларының 10-11 кластары өсөн "Башҡорт теле" уҡыу предметының эш программаһы түбәндәге норматив-хоҡуҡи документтарға ниғеҙләнеп төҙөлдө:

1. Мәғарифтең 2011-2015 йылдарға тәғәйенләнгән маҡсатлы йүнәлештә үҫеш федераль программаһы концепцияһы (2011 йылдың 7-се февралендәге 163-сө һанлы РФ дәүләтенең ҡарары);
2. Рәсәй Федерацияһының "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында"ғы 2012 йылдың 29-сы декабрендәге 273-ФЗ һанлы Федераль Законы;
3. РФ мәғариф һәм фән министрлығының 2004 йылдың 5-се мартындағы 1089 һанлы бойороғо менән раҫланған төп дөйөм белем биреү дәүләт стандарттарының федераль компоненты;
4. Рәсәй Федерацияһының "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы 1991 йылдың 25 октябрендәге 1807-1 һанлы законы (2014 йылдың 12-се мартында үҙгәртелгән);
5. Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһында Мәғариф тураһында"ғы 2013 йылдың 1-се июлендәге 696-з һанлы Законы;
6. Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы 1999 йылдың 15-се февралендәге 216-з һанлы Законы (2003-се йылдың 17-се мартында 482-з һанлы бойороғо; 2009-сы йылдың 28-се декабрендәге 192-з һанлы бойороғо);
7. 2014/2015 уҡыу йылында дөйөм белем биреү учреждениеларында ҡулланыу өсөн Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән уҡыу әсбаптары исемлеге (2014 йылдың 31 мартындағы 253- һанлы бойороғо),
8. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы төп дөйөм белем биреүҙең (аҙналыҡ) өлгө уҡыу программаһының 3-сө варианты (уҡытыу рус телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн, уның менән бергә Рәсәй халыҡтарының бер теле лә өйрәнелә) (БР мәғәриф министрлығының 2015-се йылдың 29-сы апрелендәге 905-се һанлы бойороғо);
9. З.М.Ғәбитова төҙөгән программа. "Башҡорт теле" (5-9-сы, 5-11-се класс) уҡыу ҡулланмаһына өлгө программалар: уҡытыу рус телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр өсөн). - Өфө: Китап, 2015. – 52 бит.
10. Башҡортостан Республикаһы Кушнаренко ауылы Гимназияһы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 2020-2021 «Уҡыу планы» (Башҡортостан Республикаһы Кушнаренко районы муниципаль районы Кушнаренко ауылының Гимназияһы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 2020 йылдың 20-се августындағы 241 һанлы бойороғо);
11. РФ Баш дәүләт санитар врачының 2010 йылдың 29-сы декабрендәге 189 һанлы ҡарары. "СанПиН 2.4.2.2821-10 раҫлау тураһында". "Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡыуҙы ойоштороу һәм шарттарға санитар-эпидемиологик талаптар".

Дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү буйынса эш программаһы федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар нигеҙендә төҙөлдө. Унда үҫеш программаһының төп идеялары, төп белем биреү өсөн универсаль уҡыу эшмәкәрлеге иҫәпкә алынды, шулай уҡ урта (тулы) белем биреүҙең төп дөйөм белем биреү программалары менән күсәгилешлек принциптары һаҡланды. Эш программаһы Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған "Башҡорт теле" уҡыу ҡулланмаһына өлгө программалар ("Башҡорт теле "(5-9-сы, 5-11-се класс) уҡыу ҡулланмаһына өлгө программалар: уҡытыу рус телендә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүселәр өсөн) нигеҙендә төҙөлдө.

Башҡорт теле - башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала.

Рус телле мәктәптәрҙә “Башҡорт теле” предмет булараҡ айырым урын биләй. “Башҡорт теле”н дәүләт теле булараҡ уҡытыу “Башҡорт теле” һәм “Әҙәбиәт” предметтарын берләштереп өйрәнеүгә ҡоролған.

1.2. Уҡыу предметының дөйөм маҡсаттары һәм бурыстары:

1. Башҡорт дәүләт теленә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
2. Башҡорт дәүләт телендә камил һөйләшеү, фекеренде еткерә белеү, тел һәм телмәр күнекмәләрен тәрән үҙләштереүгә өлгәшеү.
3. Уҡыусыларҙың төрлө эшмәкәрлекте (уҡыу һәм белем алыу, хеҙмәт, аралашыу күнекмәләрен) үҙләштереүҙәренә ирешеү, универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү.
4. Башҡорт халҡының рухи мираҫын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.
5. Дәреслек, өҫтәмә материал, һүҙлектәр, белешмә әҙәбиәт менән эш итеү күнекмәләрен камиллаштырыу.
6. Башҡорт телен башҡа фәндәр буйынса белем алыу сараһы булараҡ ҡулланырға әҙерләү.
7. Уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.
8. Уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радио-телетапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
9. Башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп,үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү;
10. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
11. Дәреслектәге, уҡыу ҡулланмаларындағы текстарҙы, башҡорт телендә сыға торған “Йәншишмә”, “Аҡбуҙат”, “Аманат” гәзит-журналдарын үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен биреү.
12. Аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп,үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу.
13. Башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү.
14. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
15. Йәмғиәт һәм дәүләт талаптарына тура килтереп, сифатлы белем алыу мөмкинлеген булдырыу һәм сығарылыш уҡыусыһы шәхесен социалләштереү өсөн уҡыу-уҡытыу мөхитенең эффектив системаһын булдырыу.
16. Балаларҙың һаулығын һаҡлау һәм нығытыу өсөн шарттар тыуҙырыу.
17. Белем алыуға ынтылышы көслө булған һәләтле уҡыусыларға ярҙам итеү, ата-әсәләр, уҡыусыларҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү.

1.3.Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыуҙың йөкмәтке үҙенсәлектәре шунан ғибәрәт: был үҙ йәһәтендә тел һәм лингвистик, коммуникатив, мәҙәни компетенцияны формалаштырыу һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Тел һәм лингвистик компетенция тел төҙөлөшөн, үҫешен, хәрәкәттә булыуын өйрәнә: башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренеше факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лингвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

Коммуникатив компетенция – телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре, аралашыу, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә.

Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникатив ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

Мәҙәни компетенция туған телдең мәҙәниәтен сағылдырыусы форма булараҡ тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли-мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын, халыҡ-ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереүҙе; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы күҙ уңында тота.

Башҡорт теле курсының коммуникатив-эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү, кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә туған телде өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ алдында тота.

Функциональ грамоталыкты формалаштырыу, укыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәрен белеү нигеҙендә төҙөлә.

1.4. Программаның үтәлеү ваҡыты –2 йыл

2. Уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны.

Башҡортостан Республикаһында рус телле мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы башҡорт телен дәүләт теле булараҡ 69 сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 10-сы класс - 35 сәғәт, 11-се класс - 34 сәғәт.

Классы	Контроль диктанттар	Телмәр үҫтереү
10	4	2 (изложение яҙыу-1, инша яҙыу -1)
11	4	4 (картина буйынса хикәйә төҙөү – 1, инша яҙыу – 1, һүҙлек менән тәржемә эше - 2)

3.1 Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар

10-сы класс

Уҡыусылар

- 10-сы кластарҙа өйрәнелгән синтаксис бүлеге буйынса төп мәғлүмәттәрҙе;
- башҡорт теленең дәүләт теле һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын;
- башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек булыуын;
- үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ һаҡлауҙы;
- башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән таныштырыу сараһы булыуын;
- башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион);
- башҡорт әҙәби теленең телмәр этикетын **белергә тейеш.**

Уҡыу буйынса

- төрлө стилдәге, жанрҙағы текстар менән;
- төрлө сығанаҡтарҙағы (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар, интернет ресурстары) мәғлүмәт менән;
- төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен **эш итә белергә тейеш.**

аудирование буйынса
- төрлө стилдәге, жанрҙағы тексты ишетеп, аңлап ҡабул итеү;
- аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләү, мәғлүмәтте ҡайтанан эшләү, еткереү;

һөйләү буйынса
- төрлө төрҙәге монологта (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү, төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогта (этикет, диалог – һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) иркен ҡатнашыу;
- тыңланған йә уҡылған тесты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект) һөйләү;
- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү;
- хәрәкәттең эҙмә-эҙлеклеген һаҡлау;
- өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән аныҡ итеп әйтеү;

телдән үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

яҙыу буйынса
- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү;
- өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы яҙма формала аныҡ итеп әйтеү;
- яҙма формала үҙ фекереңде еткерә белеү;
- тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау, грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу;
- үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштырыу;

текст менән эшләүҙә
- текстың мәғәнәүи һәм композицион төҙөклөгөн, бәйләнешен аңлатыу,
- текстарҙың композицион-жанр төрлөлөгөн айырыу,
- тексты мәғлүмәти эшкәртеүҙең төп төрҙәрен: план, конспект, аннотацияны ҡулланыу,
- теманы, коммуникатив ҡуйылышын, текстың төп мәғәнәһен, текстың микротемаһын табыу;
- телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрөн: һүрәтләү, хәбәр итеү, фекер йөрөтөүне айыра һәм уларҙың үҙенсәлектәрен аңлатыу.
- текстың структураһын аңлау, планын төҙөү,
- текста теманың үҫеш ысулын билдәләү,
- тексты композицион-стилистик берләштереү сараһы булараҡ абзацтың ролен аңлау,
- текстың өлөштәрен табыу һәм һөйләмдәрҙе бәйләү сараларын аңлатыу **эштәрен башҡара белергә тейеш.**

Уҡыусылар белергә тейешле мәғлүмәттәр:

Фонетика һәм орфоэпия

- телмәр ағымында өндәрҙең үҙгәрешен, һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәрешен, тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуын күреү, башҡорт телендә сингармонизмды аңлатыу,
- тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтеү, [ҡ] һәм [к] өндәренең дөрөҫ әйтеү, һүҙ башында һәм һүҙ аҙағында [в] өнөн дөрөҫ әйтеү.

Лексикология һәм фразеология

- бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу; һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһен аңлатыу,
- омонимдарҙы таныу, уларҙың күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырмалығын аңлатыу,
- синонимдарҙы таныу, синонимдарҙың мәғәнәүи һәм стилистик айырмалыҡтарын аңлатыу,
- антонимдарҙы таныу, башҡорт теленең синоним һәм антоним һүҙлектәрен ҡулланыу,
- килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһын: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе айырыу.
- фразеологизмдарҙы таныу, уларҙың мәғәнәһен фразеелогик һүҙлектән ҡарап аңлатыу,. ирекле бәйләнешле һүҙҙәр менән фразеологик берәмектәр араһындағы айырмалыҡтарҙы аңлатыу,
- төрлө типтағы (аңлатмалы, синоним, антоним, фразеологик һ.б.) лексик һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм уларҙы кәрәкле урында ҡулланыу.

Графика. Морфемика һәм һүҙьяһалыш

- форма яһаусы морфема булараҡ ялғауҙарҙы таныу, ялғауҙарҙы һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу,
- тамыр, суффикстар, морфеманың төрҙәрен таныу,
- аффикс төрҙәрен (һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм үҙгәреүсе) айырыу һәм ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу,
- һүҙҙең нигеҙе һәм нигеҙҙә булмаусы морфемаларҙы таныу,
- ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу,

Морфология

- башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһын аңлатыу, үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айырыу, мәғәнәһен, морфологик билдәләрен, синтаксик функцияларын аңлатыу,
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең ң үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалыҡтарын аңлау, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

Синтаксис

- ябай һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен таныу, уның коммуникатив һәм экспрессив-стилистик ролен аңлау;
- йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айырыу, йыйнаҡ һөйләмде тарҡау һөйләмгә үҙгәртә белеү;
- тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе айырыу, һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәт телендә кәм һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- йыйнаҡ һәм тарҡау, тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе сағыштыра белеү;
- бер составлы һөйләмдәрҙе таныу, бер составлы һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен дөрөҫ билдәләү;
- бер составлы һөйләм төрҙәрен: эйәһеҙ һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, билдәле эйәле һөйләм, атама һөйләмде таныу, уларҙың структур һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәрен анализлай белеү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙа ябай һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен күҙәтә белеү;
- ике составлы кәм һөйләмдәрҙе бер составлы һөйләмдәрҙән айыра белеү.

Орфография һәм пунктуация

- һөйләмдә тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡулланыу,
- башҡорт теле пунктуацияһының төп принциптарын аңлау.

Башҡорт халыҡ ижады

- башҡорт халыҡ ижады жанрҙарын (мәҡәл, әйтем, әкиәт, йомаҡ, һынамыш, ҡанатлы һүҙҙәр һ.б.) таныу;
- башҡорт телмәр этикет ҡағиҙәләрен телмәрҙә ҡулланыу.

Башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте

- Башҡортостан Республикаһының данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре тураһында һөйләү,
- Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары һәм шағирҙарының әҫәрҙәрен белеү һәм тасуири уҡыу;
- Башҡортостандың тарихы, байлығы, халҡы, батырҙары, сәнғәте тураһында һөйләү.

11-се класс

Уҡыусылар

- 11-се класта өйрәнелгән синтаксис бүлеге буйынса төп мәғлүмәттәрҙе;
- башҡорт теленең дәүләт теле һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын;
- башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек булыуын;
- үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ һаҡлауҙы;
- башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән таныштырыу сараһы булыуын;
- башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын (орфоэпик, лексик, грамматик, орфографик, пунктуацион);
- башҡорт әҙәби теленең телмәр этикетын **белергә тейеш.**

Уҡыу буйынса

- төрлө стилдәге, жанрҙағы текстар менән;
- төрлө сығанаҡтарҙағы (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар, интернет ресурстары) мәғлүмәт менән;
- төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен **эш итә белергә тейеш.**

аудирование буйынса

- төрлө стилдәге, жанрҙағы тексты ишетеп, аңлап ҡабул итеү;
- аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләү, мәғлүмәтте ҡайтанан эшләү, еткереү;

һөйләү буйынса

- төрлө төрҙәге монологта (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү, төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогта (этикет, диалог – һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) иркен ҡатнашыу;
- тыңланған йә уҡылған тесты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект) һөйләү;
- телдән үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

яҙыу буйынса

- өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы яҙма формала аныҡ итеп әйтеү;
- яҙма формала үҙ фекереңде еткерә белеү;
- тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау, грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙөтә алыу;
- үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштырыу**;**

текст менән эшләүҙә

- текстың мәғәнәүи һәм композицион төҙөклөгөн, бәйләнешен аңлатыу,
- текстарҙың композицион-жанр төрлөлөгөн айырыу,
- тексты мәғлүмәти эшкәртеүҙең төп төрҙәрен: план, конспект, аннотацияны ҡулланыу,
- теманы, коммуникатив ҡуйылышын, текстың төп мәғәнәһен, текстың микротемаһын табыу;
- телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрөн: һүрәтләү, хәбәр итеү, фекер йөрөтөүне айыра һәм уларҙың үҙенсәлектәрен аңлатыу.
- текстың структураһын аңлау, планын төҙөү,
- текста теманың үҫеш ысулын билдәләү,
- тексты композицион-стилистик берләштереү сараһы булараҡ абзацтың ролен аңлау,
- текстың өлөштәрен табыу һәм һөйләмдәрҙе бәйләү сараларын аңлатыу **эштәрен башҡара белергә тейеш.**

Уҡыусылар белергә тейешле мәғлүмәттәр:

Фонетика һәм орфоэпия

- телмәр ағымында өндәрҙең үҙгәрешен, һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәрешен, тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуын күреү, башҡорт телендә сингармонизмды аңлатыу,
- тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтеү, [ҡ] һәм [к] өндәренең дөрөҫ әйтеү, һүҙ башында һәм һүҙ аҙағында [в] өнөн дөрөҫ әйтеү.

Лексикология һәм фразеология

- бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе таныу; һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһен аңлатыу,
- омонимдарҙы таныу, уларҙың күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырмалығын аңлатыу,
- синонимдарҙы таныу, синонимдарҙың мәғәнәүи һәм стилистик айырмалыҡтарын аңлатыу,
- антонимдарҙы таныу, башҡорт теленең синоним һәм антоним һүҙлектәрен ҡулланыу,
- килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһын: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе айырыу.
- фразеологизмдарҙы таныу, уларҙың мәғәнәһен фразееологик һүҙлектән ҡарап аңлатыу,. ирекле бәйләнешле һүҙҙәр менән фразеологик берәмектәр араһындағы айырмалыҡтарҙы аңлатыу,
- төрлө типтағы (аңлатмалы, синоним, антоним, фразеологик һ.б.) лексик һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм уларҙы кәрәкле урында ҡулланыу.

Графика. Морфемика һәм һүҙьяһалыш

- форма яһаусы морфема булараҡ ялғауҙарҙы таныу, ялғауҙарҙы һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу,
- тамыр, суффикстар, морфеманың төрҙәрен таныу,
- аффикс төрҙәрен (һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм үҙгәреүсе) айырыу һәм ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу,

- һүҙҙең нигеҙе һәм нигеҙҙә булмаусы морфемаларҙы таныу,
- ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу,

Морфология

- башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһын аңлатыу, үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айырыу, мәғәнәһен, морфологик билдәләрен, синтаксик функцияларын аңлатыу,
- ярҙамсы һүҙ төркөмдәренең ң үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалыҡтарын аңлау, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу.

Синтаксис

- ябай һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен таныу, унның коммуникатив һәм экспрессив-стилистик ролен аңлау;
- йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәрҙе айырыу, йыйнаҡ һөйләмде тарҡау һөйләмгә үҙгәртә белеү;
- тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе айырыу, һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәт телендә кәм һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен аңлау;
- йыйнаҡ һәм тарҡау, тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе сағыштыра белеү;
- бер составлы һөйләмдәрҙе таныу, бер составлы һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен дөрөҫ билдәләү;
- бер составлы һөйләм төрҙәрен: эйәһеҙ һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, билдәле эйәле һөйләм, атама һөйләмде таныу, уларҙың структур һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәрен анализлай белеү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙа ябай һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәрен күҙәтә белеү;
- ике составлы кәм һөйләмдәрҙе бер составлы һөйләмдәрҙән айыра белеү;
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙе таныу, һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙең булыу шарттарын белеү; тиң киҫәктәрҙең бәйләнеү юлдарын аңлау;
- тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәрен аңлата белеү;
- өндәш һүҙҙәрҙе таныу, уларҙың функцияһын аңлау;
- өндәш һүҙле һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән әйтеү;
- аралашыу сфераһына һәм ситуацияһына ҡарап, телмәрҙә өндәш һүҙҙәр менән һөйләмдәр ҡулланыу.

Орфография һәм пунктуация

- һөйләмдә тыныш билдәләрен дөрөҫ ҡулланыу,
- башҡорт теле пунктуацияһының төп принциптарын аңлау.

Башҡорт халыҡ ижады

- башҡорт халыҡ ижады жанрҙарын (мәҡәл, әйтем, әкиәт, йомаҡ, һынамыш, ҡанатлы һүҙҙәр һ.б.) таныу;
- башҡорт телмәр этикет ҡағиҙәләрен телмәрҙә ҡулланыу.

Башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте

- Башҡортостан Республикаһының данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре тураһында һөйләү,
- Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары һәм шағирҙарының әҫәрҙәрен белеү һәм тасуири уҡыу;

Башҡортостандың тарихы, байлығы, халҡы, батырҙары, сәнғәте тураһында һөйләү

4. УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕ

4.1. Коммуникатив компетенция формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке

Телмәр һәм аралашыу телмәре
Башҡорт дәүләт телендә аралаша белеү уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни-тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра, күп милләтле Рәсәйҙең рухи һәм әхлаҡ потенциялы тураһында ҡараштарын киңәйтә.
Аралашыу телмәренең төрҙәре: телдән һәм яҙма телмәр; диалогик һәм монологик телмәр; уларҙың төрҙәре һәм үҙенсәлектәре.
Аралашыу ситуацияһы һәм уның компоненттары: ҡатнашыусылар (адресант һәм адресат), аралашыу шарттары. Типик аралашыу шарттарында телмәр ҡағиҙәләренең нормаларын белеү.
Аралашыу телмәренең шарттары. Аралашыу телмәренең уңышы. Аралашыу уңышһыҙлығының сәбәптәре һәм унан сығыу юлдары.
Телмәр эшмәкәрлеге.
Эшмәкәрлек булараҡ телмәр.
Телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре: аудирование, уҡыу, һөйләү, яҙыу. Телмәр эшмәкәрлегенең һәр бер төрөнөң үҙенсәлектәре. Телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралашыу.
Уҡыу. Төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү. Төрлө сығанаҡтарҙан (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмалар, интернет ресурстары) мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге булдырыу. Төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу. Стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу.
Аудирование. Телдән хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт), төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп аңлау. Аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләү, мәғлүмәтте ҡайтанан эшләү, еткереү.
Һөйләү. Төрлө төрҙәге монологта (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалогта (этикет, диалог – һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б.; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүе) иркен ҡатнашыу. Тыңланған йә уҡылған тесты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләү. Алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү, хәрәкәттең эҙмә-эҙлеклеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән адекват аныҡ итеп әйтеү. Телдән үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау.
Яҙыу. Алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү. Адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап яҙма текст төҙөү. Яҙма формала үҙ фекереңде еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау, грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштырыу.
Телмәр мәҙәниәте. Аралаша белеү – мәҙәниәттең мөһим өлөшө. Аралашыу мәҙәниәтенең кеше тормошондағы роле. Телмәрҙе кәрәкле осраҡта корректировкалау һәм телмәрҙең дөрөҫлөгөн баһалау. Башҡорт телмәр этикеты ҡағиҙәләрен уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта урынлы ҡулланыу.
Текст
Телмәр эшмәкәрлегенең һөҙәмтәһе булараҡ текст. Тексттың аңлатмаһы, тексттың төп билдәләре. Тексттың мәғәнәүи һәм композицион төҙөклөгө, бәйләнеше. Текстарҙың композицион-жанр төрлөлөгө. Тексты мәғлүмәти эшкәртеүҙең төп төрҙәре: план, конспект, аннотация.
Тема, коммуникатив ҡуйылыш, тексттың төп мәғәнәһе. Тексттың микротемаһы.
Телмәрҙең функциональ-мәғәнәүи төрө: һүрәтләү, хәбәр итеү, фекер йөрөтөү. Уларҙың үҙенсәлектәре.

Текстың структураһы. Текст планы. Текста теманың үҫеш ысулы. Тексты композицион-стилистик берләштереү сараһы булараҡ абзац. Текстың өлөштәрен һәм һөйләмдәрҙе бәйләү саралары.

4.2. Тел һәм лингвистик компетенцияны формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке

Телдең системаһы

Телдең төп берәмектәре: өн, морфема, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст.

Фонетика һәм орфоэпия

Тел берәмеге булараҡ өн. Өндәрҙең айырмалары.

Башҡорт телендә һуҙынҡы өндәрҙең системаһы, нәҙек һәм ҡалын һуҙынҡылар; иренләшкән һәм иренләшмәгән һуҙынҡылар. Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше.

Башҡорт телендә тартынҡы өндәр системаһы. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар.

Телмәр ағымында өндәрҙең үҙгәреше. Һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше. Тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы. Башҡорт телендә сингармонизм.

Ижек, баҫым, уның мәғәнә айырмалыҡтағы роле. Башҡорт телендә баҫым үҙенсәлектәре. Асыҡ һәм ябыҡ ижектәр. Баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәр.

Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше. [ҡ] һәм [к] өндәренең дөрөҫ әйтелеше. Һүҙ башында һәм һүҙ аҙағында [в] өнөнөң дөрөҫ әйтелеше.

Лексикология һәм фразеология

Телдең берәмеге булараҡ һүҙ. Башҡа тел берәмектәренән һүҙҙең айырмалығы. Һүҙҙең лексик һәм грамматик мәғәнәһе. Һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыуҙың төп ысулдары.

Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр; һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе.

Омонимдар, уларҙың күп мәғәнәле һүҙҙәрҙән айырмалығы.

Синонимдар. Синонимдарҙың мәғәнәүи һәм стилистик айырмалыҡтары.

Антонимдар. Башҡорт теленең синоним һәм антоним һүҙлектәре.

Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең лексикаһы: төп башҡорт һүҙҙәре һәм үҙләштерелгән һүҙҙәр. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең төп сәбәбе.

Фразеологизмдар, уларҙың мәғәнәһе. Ирекле бәйләнешле һүҙҙәр менән фразеологик берәмектәр араһындағы айырмалыҡтар.

Мәҡәл, әйтем. Афоризм. Ҡанатлы һүҙҙәр. Фразеологияла башҡорт халҡының матди һәм рухи мәҙәниәте. Фразеологик һүҙлектәр.

Лексика һәм фразеологияның төп һүрәтләү саралары.

Лексик һүҙлектәр һәм туған телдең һүҙ байлығын үҙләштереүҙә уларҙың роле. Төрлө типтағы (аңлатмалы, синоним, антоним, фразеологик һ.б.) лексик һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте алыу һәм уларҙы кәрәкле урында ҡулланыу.

Графика. Морфемика һәм һүҙьяһалыш

Башҡорт алфавитының составы, хәрефтәрҙең атамаһы. Өн һәм хәрефтәрҙең нисбәте. Яҙыуҙа ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Баш һәм юл хәрефтәре.

Тамыр, суффикстар, морфеманың төрҙәре. Аффикс төрҙәре: һүҙ яһаусы, форма яһаусы һәм үҙгәреүсе. Һүҙҙең нигеҙе һәм нигеҙҙә булмаусы морфемалар. Форма яһаусы морфема булараҡ ялғауҙар. Ялғауҙар һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышын ғәмәлдә дөрөҫ ҡулланыу. Ҡушма һәм парлы һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

Тамыр. Тамырҙаш һүҙҙәр. Тамырҙа һуҙынҡы һәм тартынҡыларҙың сиратлап килеүе.

Морфология
Башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһы. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре.
Һүҙ төркөмө булараҡ исем, уның дөйөм категориаль мәғәнәһе, морфологик билдәләре. Синтаксик функциялары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Башҡорт телендә енес төшөнсәһе, һан, килеш.
Һүҙ төркөмө булараҡ сифат. Морфологик билдәһе. Синтаксик функцияһы. Сифат дәрәжәләре. Сифаттарҙың яһалышы, уларҙың дөрөҫ яҙылышы.
Һүҙ төркөмө булараҡ һан, уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Ябай һәм ҡушма һандар, һан төркөмсәләре.
Һүҙ төркөмө булараҡ алмаш, уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы. Алмаштарҙың һөйләмдәге роле. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштарҙың үҙгәреше.
Һүҙ төркөмө булараҡ ҡылым, уның морфологик билдәһе, синтаксик функцияһы.
Һүҙ төркөмө булараҡ рәүеш, уның дөйөм категориаль мәғәнәһе, морфологик билдәләре һәм синтаксик функцияһы. Рәүеш төркөмсәләре.
Сифаттарҙың рәүеш урынында ҡулланыуы. Рәүештәрҙең яһалышы һәм уларҙың дөрөҫ яҙылышы.
Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәренә дөйөм характеристика; уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмалыҡтары.
Һүҙ төркөмө булараҡ бәйләүес. Бәйләүестәрҙең мәғәнәһе һәм телмәрҙәге роле. Бәйләүестәрҙең бүленеше. Бәйләүестәрҙең синтаксик функцияһы.
Һүҙ төркөмө системаһында теркәүестең урыны. Теркәүестәрҙең төрҙәре.
Һүҙ төркөмө системаһында киҫәксәнең урыны.
Мөнәсәбәт һүҙҙәр, ымлыҡтар тураһында дөйөм төшөнсә.
Синтаксис
Грамматиканың бүлеге булараҡ синтаксис. Синтаксистың берәмеге булараҡ һөйләм һәм һүҙбәйләнеш. Һүҙбәйләнештең номинатив функцияһы һәм һөйләмдең коммуникатив функцияһы. Синтаксик бәйләнештең төрҙәре һәм саралары. Һүҙбәйләнештең төп билдәләре.
Һөйләм. Аралашыуҙың иң мөһим һәм төп формаһы булараҡ һөйләм. Һөйләмдең башҡа тел берәмектәренән айырмалығы.
Интонация, уның функциялары. Интонацияның төп элементтары: логик баҫым, пауза, мелодика, темп.
Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре: хәбәр, һорау, бойороҡ, өндәү һөйләмдәр. Әйтелеү маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәренең мәғәнәһе һәм структур үҙенсәлектәре.
Һөйләмдең грамматик нигеҙе. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәр, уларҙың мәғәнәүи һәм структур айырмалыҡтары.
Ике составлы һөйләмдәр. Ябай һөйләмдең синтаксик структураһы. Ике составлы һөйләмдәрҙең баш киҫәктәре. Эйәне сағылдырыусы морфологик ысулдар. Хәбәр төрҙәре: ябай һәм ҡушма хәбәр. Эйә менән хәбәрҙең ярашыу үҙенсәлектәре.
Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре: аныҡлаусы, тултырыусы, хәл (рәүеш, күләм-дәрәжә, ваҡыт, урын, сәбәп, маҡсат, шарт, кире). Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен сағылдырыу ысулдары.
Ябай һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе, уның коммуникатив һәм экспрессив-стилистик роле.
Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Һөйләү телмәрендә һәм матур әҙәбиәт телендә кәм һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәре.

Бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәрҙең баш киҫәктәре. Бер составлы һөйләм төрҙәре: эйәһеҙ һөйләм, билдәһеҙ эйәле һөйләм, билдәле эйәле һөйләм, атама һөйләм, уларҙың структур һәм мәғәнәүи үҙенсәлектәре. Төрлө стилдәге һәм жанрҙағы текстарҙа ябай һөйләмдәрҙе ҡулланыу үҙенсәлектәре.
Тиң киҫәкле һөйләмдәр. һөйләмдәрҙә тиң киҫәктәрҙең булыу шарттары. Тиң киҫәктәрҙең бәйләнеү юлдары. Тиң киҫәкле һөйләмдәрҙең интонацион һәм пунктуацион үҙенсәлектәре.
Өндәш һүҙҙәр, уларҙың функцияһы. Өндәш һүҙле һөйләмдәрҙең интонацияһы.

Орфография һәм пунктуация

Һөйләмдә һүҙҙәрҙе яҙыу һәм тыныш билдәләрен ҡуйыуҙы яйға һалыусы ҡағиҙә системаһы булараҡ дөрөҫ яҙыу. Һүҙҙәрҙе һәм уларҙың нормаларын дөрөҫ яҙыу.
Һөйләмдә тыныш билдәләрен ҡулланыу. Башҡорт теле пунктуацияһының төп принциптары.

4.3. Мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы тәьмин итеүсе йөкмәтке

Тел һәм мәҙәниәт

Аралашыуҙың нормаһына, шартына, сфераға ярашлы тел сараларын һайлау.
Телдә мәҙәниәт һәм халыҡ тарихының сағылышы.
Башҡорт телмәр этикеты.
Милли-мәҙәни компонент. Лингвистик (аңлатмалы, этимологик һ.б.) һүҙлектәрҙең мәғәнәһе.

Халыҡ йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре. Тел һәм мәҙәниәт.

башҡорт халҡының һаҡланып, быуындан-быунға тапшырылып килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре.

10-сы класс

Белем көнө

1-се сентябрь – Белем көнө. Ватан, тыныслыҡ, мәктәп, уҡыу һәм уға мөнәсәбәт тураһында текстар уҡыу дауам итә. Уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш даими дауам итә. Мәктәп, тыуған ил, тыуған төйәк хаҡында әңгәмәләр үткәреү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Башҡортостан – тыуған төйәгем.

Башҡортостан, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй кимәлендә тотҡан урыны, уның байлығы, күренекле шәхестәре, халҡы, батырҙары, сәнғәте хаҡында текстар уҡыу, әңгәмәләр, осрашыуҙар, экскурсиялар ойоштороу. 10-сы класс уҡыусылары уҡығандары дөрөҫ, шыма итеп һөйләй белергә, әңгәмәлә еңел ҡатнаша, аралаша алырға тейеш. Диалогик, монологик телмәр менән эш итә белеүгә өлгәшергә кәрәк. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Ап-аҡ ҡарҙар яуа.

Башҡортостанда ҡыш, уның билдәләре, ҡышҡы тәбиғәт, Яңы йыл байрамы, балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу. Тәбиғәтте күҙәтеү, ҡыш йәнлектәр һәм ҡоштар тормошо тураһында һөйләү, уҡыу, танышыу. Был турала уҡыусыларҙы дөрөҫ, аныҡ, тулы итеп һөйләргә өйрәтеү маҡсатынан тормошҡа ашырыу өҫтөндә даими эш алып барыу.“Яңы йылды ҡайҙа һәм нисек ҡаршылайһығыҙ?”

темаһына әңгәмә ойоштороу. Исем Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе. Килеш ялғауҙары.Рәүеш Баҫым.. Ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһы. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Шаулап – гөрләп яҙ килә.
Башҡортостанда яҙ. уның биҙәктәре, тәбиғәттәге үҙгәрештәр тураһында уҡыу. Ҡатын-ҡыҙҙар, һөйөклө әсәйҙәр тураһында күберәк һөйләшеү күҙ уңында тотола. Ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата хөрмәт, уларға иғтибарлы булыуҙы тәрбиәләү төп маҡсаттарҙың береһе һанала. Сифат. Һүҙбәйләнеш.. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Йәйҙең йәмле көндәрендә.
Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса төрлө эш төрҙәре үткәреү. Йәй миҙгеле, байрамдар, һуңғы ҡыңғырау шылтырауы, йәйге ял темаһы буйынса әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу, уҡыусыларҙың алған тәьҫораттары буйынса эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәтеү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡортостан ҡоштары
Башҡортостан ҡоштары, уларҙың көн итеүҙәре, һәр ҡош төрөнөң үҙенсәлекле яҡтары менән таныштырыу. Яҙыусы, шағирҙарҙың ҡоштар тураһында яҙған әҫәрҙәрен уҡыу, улар ярҙамында уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, телмәр үҫтереү. Башҡортостандағы ҡышлаусы һәм осоусы ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Риза булмау, кире ҡағыу һүҙҙәре. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡорт йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре
Башҡорт халҡының һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, әҙәп ҡағиҙәләре менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Һәр йоланың үҙенсәлекле яҡтарын билдәләү, башҡорт халыҡ йолаларын башҡа халыҡ йолаларынан айырмалы яҡтарын билдәләй белеү. Күренекле шәхестәрҙең фәһемле һүҙҙәре, яҙыусы, шағирҙарҙың әҫәрҙәре менән танышыу. . Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡортостанда ҡыш
Башҡортостанда ҡыш, уның билдәләре, балаларҙың ҡышҡы уйындары һәм байрамдары тураһында уҡыу. Тәбиғәтте күҙәтеү, ҡыш йәнлектәр һәм ҡоштар тормошо тураһында һөйләү, уҡыу, танышыу. Был турала уҡыусыларҙы дөрөҫ, аныҡ, тулы итеп һөйләргә өйрәтеү маҡсатынан тормошҡа ашырыу өҫтөндә даими эш алып барыу.“Яңы йылды ҡайҙа һәм нисек ҡаршылайһығыҙ?” темаһына әңгәмә ойоштороу. Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре. Өҫтәлмәлектәрҙең айырымланыуы. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Һөнәрҙәр
Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, ололарҙың һәм балаларҙың хеҙмәте, һөнәр, кәсептәрҙең күплеге, һәр кешенең үҙенә һөнәр һайлай белеүе тураһында текстар уҡыу. Был турала уҡыусылар менән әңгәмә үткәреү, экскурсияларға йөрөтөү, хеҙмәт кешеләре менән осрашыуҙар ойоштороу. Укыусы хеҙмәт, һөнәр һайлау тураһында иркен аралаша алыуы, уның тураһында һөйләй алыуын маҡсат итеп ҡуйыу кәрәк. Айырымланған хәл. Хәл әйтеменең айырымланыуы. Ҡушма ҡылымдар. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡортостандың иҫтәлекле урындары
Башҡортостандың күренекле урындары менән таныштырыу. Улар тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Уҡыусыларға ла Башҡортостан Республикаһындағы данлыҡлы урындар тураһында материалдар йыйҙырыу, күргән-белгәндәрен, йыйған материалдары буйынса башҡорт телендә уҡыусылар менән уртаҡлаштырыу. Уҡыусыларҙа үҙ республикаһына, тыуған төйәккә ҡарата ғорурлыҡ тойғоһо

тыуҙырыу. Тура телмәрле һөйләмдәр. Эш-хәрәкәт һәм эшмәкәрлек, хәрәкәт; хәл-торош, телмәр; өн-оҡшатыу ҡылымдары. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Башҡорт музыка ҡоралдары

Башҡорттарҙың рухи һәм материаль культураһында халыҡ музыка ҡоралдарының әһәмиәтле урын алып тороуы менән таныштырыу. Ул өлкәлә данлыҡлы кешеләрҙең тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Улар тураһында уҡыусыларҙың дөрөҫ итеп һөйләүенә өлгәшеү. Башҡорт телендә һөйләм төҙөлөшө. Һөйләмдәрҙе составы буйынса тикшереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Бигерәк йәмле йәй көндәре

Бәйләнешле телмәр үҫтереү буйынса төрлө эш төрҙәре үткәреү. Йәй миҙгеле, байрамдар, һуңғы ҡыңғырау шылтырауы, йәйге ял темаһы буйынса әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу, уҡыусыларҙың алған тәьҫораттары буйынса әҙмә-әҙлекле итеп һөйләргә өйрәтеү. Инеш һүҙҙәр. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

11-се класс

Тыуған илем – Башҡортостан

Башҡортостан, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй кимәлендә тотҡан урыны, уның байлығы, күренекле шәхестәре, халҡы, батырҙары, сәнғәте хаҡында текстар уҡыу, әңгәмәләр, осрашыуҙар, экскурсиялар ойоштороу. 11-се класс уҡыусылары уҡығандары дөрөҫ, шыма итеп һөйләй белергә, әңгәмәлә еңел ҡатнаша, аралаша алырға тейеш. Ике составлы һөйләмдәр. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Башҡортостан сәнғәте

Башҡортостан Республикаһында сәнғәт үҫеше. Сәнғәт әһелдәре, сәсәндәр, улар хаҡында яҙылған текстар менән танышыу. Тема буйынса уҡытыусынан һәм уҡыусыларҙан да ижади эш талап ителә. Кәм һәм тулы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләм төрҙәре. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре.Тулы һәм кәм һөйләмдәр. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары

Башҡорт халыҡ шағир-яҙыусылары тураһында белешмә. Уларҙың тормош һәм ижад юлы менән таныштырыу. Уҡыусылар һәр шағир, яҙыусы хаҡында һөйләй белергә һәм уларҙың әҫәрҙәрен танып, атай белергә тейеш. Бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү; текст өҫтөндә эшләүгә иғтибар арттырыу. Әҫәрҙең идеяһы. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. Ҡушма һөйләмдәр.Һөйләмдәргә синтаксик анализ. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

4.4. Уҡытыу буйынса сәғәттәрҙе тематик бүлеү таблицалары.

10-сы класта тематик планлаштырыу

Уҡыу курсының бүлеге, темалары	**Сәғәттәр һаны**	**Контроль эштәр**	**Телмәр үҫтереү**
Белем көнө. У.Кинйәбулатов. “Уҡытыусыма”.Фразеологик берәмектәр.	**1**		
Ғ.Хәсәйенов. “Автобиографиям”. “Ваҡыт”.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.	**1**		
Н.Мусин ижады. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре.	**1**		

З.Биишева.”Дуҫтарға”.Исем.	**1**		
Башҡортостан – тыуған төйәгем. Ф.Рәхимғолова.”Мин - Башҡортостандан”	**1**		
Р.Паль “Уралым”.Ҡушма һүҙҙәр.	**1**		
Н.Нәжми.“Һинең ниндәй улыңмын мин”.Ҡылым.	**1**		
Контроль диктант.	**1**	**1**	
Ҡыҙыл китап.Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.	**1**		
Башҡортостан – тыуған төйәгем.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр**.**	**1**		
Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы.	**1**		
Т.ү.Б.Домашников “Ҡариҙел” картинаһы буйынса инша яҙыу.	**1**		**1**
Ап – аҡ ҡарҙар яуа. Р.Ғарипов ижады. “Ҡыш әкиәте”. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.	**1**		
Г.Юнысова. “Яңы йыл йыры”.Баҫым.	**1**		
Науруз байрамы.Рәүеш. Һин кем булырға теләр инең?	**1**		
Т.ү. И.И.Шишкиндың “Ҡыш” картинаһы буйынса инша яҙыу.	**1**		**1**
М.Кәримов. “Фаҫылдар”. Ыңғай һәм кире ҡылымдар. Үҙ аллы эш.	**1**	**1**	
Шаулап – гөрләп яҙ килә. Е.Кучеров. “Иртә яҙ”, Г.Ҡыуатова.”Март бураны”.	**1**		
Е.Исаев. “Иң мөһим кеше”.Сифат.	**1**		
Р.Назаров. “Яҙ килә”.	**1**		
А.Игебаев ижады. “Әсә күңеле”.Һүҙбәйләнеш.	**1**		
“Йәшел алтын”.Һүҙбәйләнеш.	**1**		
Л.Н.Толстой. “Яҙ килде”.Һүҙлек менән эш.	**1**		
Назар Нәжми ижады. “Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә”.Умырзая.	**1**		
Контроль диктант.	**1**	**1**	
Хаталар өҫтөндә эш. Этикет ҡағиҙәләре.	**1**		
Һаулыҡ һораша беләһегеҙме? Һүҙбәйләнеш.	**1**		
Йәйҙең йәмле көндәрендә. Р.Сабитов. “Йәй”.	**1**		
Хәсән Назаров. “Өс һүҙ”.	**1**		
Д.Бүләков. “Һабантуй”.Ҡылым.	**1**		
Контроль эш.	**1**	**1**	
Тормошҡа ашмаҫтай эш юҡ.	**1**		

А.Игебаев. “Башҡортостан - илгенәм”.	**1**		
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.	**1**		
Йомғаҡлау дәресе.	**1**		
Бөтәһе	**35**	**4**	**2**

11-се класта тематик планлаштырыу

Уҡыу курсының бүлеге, темалары	**Сәғәттәр һаны**	**Контроль эштәр**	**Телмәр үҫтереү**
Белем көнө. Тыуған илем – Башҡортостан.М.Кәрим. Ҡайын япрағы тураһында. Ике составлы һөйләмдәр	**1**		
Р.Йәнбәк. Мәңге балҡы, Башҡортостан! Синтаксис.	**1**		
Ф.Туғыҙбаева. Эй, яҙмышым минең – Башҡортостан.	**1**		
Т.ү. Ғ.Зәйнетдинов.Г.Калитов. “Ер рухы” картинаһы буйынса хикәйә төҙөү**.**	**1**		**1**
Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре	**1**		
С.Кудашев ижады.Торналар киткәндә.	**1**		
Контроль диктант.Ватаным.	**1**	**1**	
Башҡортостан сәнғәте.М.Ямалетдинов Мираҫ.	**1**		
Рудольф Нуриев ижады. Тулы һәм кәм һөйләмдәр	**1**		
Ҡ.Аралбаев ижады. “Дуҫлыҡ һәйкәле”	**1**		
Рәссам Әнүәр Кашаев ижады.Бер составлы һөйләмдәр.	**1**		
М.Йәлил.”Йырҙарым”. Ябай һөйләм һәм уның төрҙәре.	**1**		
Кемдәр улар сәсәндәр? Б.Вәлид.”Сәсәндәр”.Һүҙлек менән эш.	**1**		
Контроль диктант.Ҡырсынташ.	**1**	**1**	
Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары.	**1**		
Р.Бикбаев ижады.”Башҡортостан йәштәре”.	**1**		
Т.ү. Ә.Кашаевтың “Тыуған яҡ” картинаһы буйынса инша яҙыу.	**1**		**1**
Р. Сабитов. “Ҡыр ҡаҙы”. Идея. Образ.	**1**		
Мәжит Ғафури ижады. Бир ҡулыңды. Һан.	**1**		
.К.Паустовский. “Детство”.Һүҙлек менән эш.	**1**		**1**
Мостай Кәрим ижады. “Коштар осорам”.Һөйләмдең баш киҫәктәре.	**1**		
А.Филлипов.”Крыло души”. Һүҙлек менән эш.	**1**		**1**
Әхиәр Хәкимов ижады. “Һауыр ҡумта” романынан өҙөк.	**1**		

Контроль диктант. Нефрит – күк ташы.	**1**	**1**	
Әнғәм Атнабаев.”Әсәйемә”.Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы.	**1**		
Рәшит Ниғмәти ижады. “Йәйге ямғыр”.Ҡушма һөйләмдәр.	**1**		
Р.Назаров ижады.”Ҡалһын ине”.	**1**		
М.Ғәли. “Өмөтөңдө генә өҙмә, кешем”. Шүлгәнташ мәмерйәһе.	**1**		
З.Биишева “Игенсе”.Алмаштар	**1**		
Тимер Йосопов ижады. Күрһәтеү алмаштары	**1**		
Ә.Үтәбай.”Башҡортостан”.Ләйсән.	**1**		
З.Ханнанова. “Хуш, мәктәбем!”	**1**		
Контроль диктант.	**1**	**1**	
Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Йомғаҡлау дәресе.	**1**		
Бөтәһе	**34**	**4**	**4**

5. Календарь-тематик планлаштырыу

10-сы класс өсөн “Башҡорт теле” предметы буйынса календарь-тематик планлаштырыу. Дәреслек авторҙары: М., Усманова М.Ғ., Ғәбитова З. Өфө: Китап.

Д №	Дәрес темаһы	Сәғәт һаны	Үткәрелеү ваҡыты	
			План буйынса	Фактик
1.	**Белем көнө**. У.Кинйәбулатов. “Уҡытыусыма”.Фразеологик берәмектәр.	**4** 1	1-се аҙна	
2.	Ғ.Хәсәйенов. “Автобиографиям”. “Ваҡыт”.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре.	1	2 -се аҙна	
3.	Н.Мусин ижады. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәре.	1	3 -сө аҙна	
4.	З.Биишева.”Дуҫтарға”.Исем.	1	4-се аҙна	
5.	**Башҡортостан – тыуған төйәгем**. Ф.Рәхимғолова.”Мин - Башҡортостандан”	**8** 1	5-се аҙна	

6.	Р.Паль “Уралым”.Ҡушма һүҙҙәр.	1	6-сы аҙна	
7.	Н.Нәжми.“Һинең ниндәй улыңмын мин”.Ҡылым.	1	7 -се аҙна	
8.	Контроль диктант.	1	8-се аҙна	
9.	Ҡыҙыл китап.Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.	1	9 -сы аҙна	
10.	Башҡортостан – тыуған төйәгем.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр**.**	1	10-сы аҙна	
11.	Өфө – Башҡортостандың баш ҡалаһы.	1	11-се аҙна	
12.	Т.ү.Б.Домашников “Ҡариҙел” картинаһы буйынса инша яҙыу.	1	12-се аҙна	
13.	**Ап – аҡ ҡарҙар яуа.** Р.Ғарипов ижады. “Ҡыш әкиәте”. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.	**5** 1	13-сө аҙна	
14.	Г.Юнысова. “Яңы йыл йыры”.Баҫым.	1	14-се аҙна	
15.	Науруз байрамы.Рәүеш. Һин кем булырға теләр инең?	1	15-се аҙна	
16.	Т.ү. И.И.Шишкиндың “Ҡыш” картинаһы буйынса инша яҙыу.	1	16-сы аҙна	
17.	М.Кәримов. “Фаҫылдар”. Ыңғай һәм кире ҡылымдар.	1	17-се аҙна	
18.	**Шаулап – гөрләп яҙ килә**. Е.Кучеров. “Иртә яҙ”, Г.Ҡыуатова.”Март бураны”.	**10** 1	18-се аҙна	
19.	Е.Исаев. “Иң мөһим кеше”.Сифат.	1	19-сы аҙна	
20.	Р.Назаров. “Яҙ килә”.	1	20-се аҙна	
21.	А.Игебаев ижады. “Әсә күңеле”.Һүҙбәйләнеш.	1	21 -се аҙна	
22.	“Йәшел алтын”.Һүҙбәйләнеш.	1	22 -се аҙна	
23.	Л.Н.Толстой. “Яҙ килде”.Һүҙлек менән эш.	1	23 -сө аҙна	

24.	Назар Нәжми ижады. “Кайтманығыҙ тыуған ерҙәргә”.Умырзая.	1	24-се аҙна	
25.	Контроль диктант.	1	25-се аҙна	
26.	Хаталар өҫтөндә эш. Этикет ҡағиҙәләре.	1	26-сы аҙна	
27.	Һаулыҡ һораша беләһегеҙме? Һүҙбәйләнеш.	1	27 -се аҙна	
28.	**Йәйҙең йәмле көндәрендә.** Р.Сабитов. “Йәй”.	**8** 1	28-се аҙна	
29.	Хәсән Назаров. “Өс һүҙ”.	1	29-сы аҙна	
30.	Д.Бүләков. “Һабантуй”.Кылым.	1	30-сы аҙна	
31.	Контроль эш.	1	31-се аҙна	
32.	Тормошҡа ашмаҫтай эш юҡ.	1	32-се аҙна	
33.	А.Игебаев. “Башҡортостан - илгенәм”.	1	33-сө аҙна	
34.	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.	1	34-се аҙна	
35.	Йомғаҡлау дәресе.	1	35-се аҙна	

11-сы класс өсөн “Башҡорт теле” предметы буйынса календарь-тематик планлаштырыу. Дәреслек авторҙары: М., Усманова М.Ғ., Ғәбитова З. Өфө: Китап.

Д№	Дәрес темаһы	Сәғәт һаны	Үткәрелеү ваҡыты	
			План буйынса	**Фактик**
1.	***Белем көнө.*** Тыуған илем – Башҡортостан.М.Кәрим. Ҡайын япрағы тураһында. Ике составлы һөйләмдәр	**7** 1	1-се аҙна	
2.	Р.Йәнбәк. Мәңге балҡы, Башҡортостан! Синтаксис.	1	2 -се	

			аҙна	
3.	Ф.Туғыҙбаева. Эй, яҙмышым минең – Башҡортостан.	1	3 -сө аҙна	
4.	Т.ү. Ғ.Зәйнетдинов.Г.Калитов. “Ер рухы” картинаһы буйынса хикәйә төҙөү**.**	1	4-се аҙна	
5.	Салауат Юлаев – башҡорт халҡының милли батыры. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре	1	5-се аҙна	
6.	С.Кудашев ижады.Торналар киткәндә.	1	6-сы аҙна	
7.	Контроль диктант.Ватаным.	1	7 -се аҙна	
8.	**Башҡортостан сәнғәте.**М.Ямалетдинов Мираҫ.	**7** 1	8-се аҙна	
9.	Рудольф Нуриев ижады. Тулы һәм кәм һөйләмдәр	1	9 -сы аҙна	
10.	Ҡ.Аралбаев ижады. “Дуҫлыҡ һәйкәле”	1	10-сы аҙна	
11.	Рәссам Әнүәр Кашаев ижады.Бер составлы һөйләмдәр.	1	11-се аҙна	
12.	М.Йәлил.”Йырҙарым”. Ябай һөйләм һәм уның төрҙәре.	1	12-се аҙна	
13.	Кемдәр улар сәсәндәр? Б.Вәлид.”Сәсәндәр”.Һүҙлек менән эш.	1	13-сө аҙна	
14..	Контроль диктант.Ҡырсынташ.	1	14-се аҙна	
15.	**Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары.**	**20** 1	15-се аҙна	
16.	Р.Бикбаев ижады.”Башҡортостан йәштәре”.	1	16-сы аҙна	
17.	Т.ү. Ә.Кашаевтың “Тыуған яҡ” картинаһы буйынса инша яҙыу.	1	17-се аҙна	

18.	Р. Сабитов. “Кыр ҡаҙы”. Идея. Образ.	1	18-се аҙна	
19.	Мәжит Ғафури ижады. Бир ҡулыңды. Һан.	1	19-сы аҙна	
20.	.К.Паустовский. “Детство”.Һүҙлек менән эш.	1	20-се аҙна	
21.	Мостай Кәрим ижады. “Ҡоштар осорам”.Һөйләмдең баш киҫәктәре.	1	21 -се аҙна	
22.	А.Филлипов.”Крыло души”. Һүҙлек меән эш.	1	22 -се аҙна	
23.	Әхиәр Хәкимов ижады. “Һауыр ҡумта” романынан өҙөк.	1	23 -сө аҙна	
24.	Контроль диктант. Нефрит – күк ташы.	1	24-се аҙна	
25.	Әнғәм Атнабаев.”Әсәйемә”.Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы.	1	25-се аҙна	
26.	Рәшит Ниғмәти ижады. “Йәйге ямғыр”.Ҡушма һөйләмдәр.	1	26-сы аҙна	
27.	Р.Назаров ижады.”Ҡалһын ине”.	1	27 -се аҙна	
28.	М.Ғәли. “Өмөтөңдө генә өҙмә, кешем”. Шүлгәнташ мәмерйәһе.	1	28-се аҙна	
29.	З.Биишева “Игенсе”.Алмаштар	1	29-сы аҙна	
30.	Тимер Йосопов ижады. Күрһәтеү алмаштары	1	30-сы аҙна	
31.	Ә.Үтәбай.”Башҡортостан”.Ләйсән.	1	31-се аҙна	
32.	З.Ханнанова. “Хуш, мәктәбем!”	1	32-се аҙна	

33.	Контроль диктант.	1	33-сө аҙна	
34.	Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Йомғаҡлау дәресе.	1	34-се аҙна	

6. Программаға ҡушымталар

10 класс
Контроль диктант №1

II. БЕҘҘӘ ҠЫШЛАУСЫ ҠОШТАР.

Ҡыш беҙҙең яҡта бик ҡаты була. Ыжғыр бурандар ҡоторона, ел олой. Был ваҡытта сыйырсыҡ, ҡарлуғас, һандуғастар күптән йылы яҡҡа киткән була. Беҙҙә ҡышларға сәүкә, һайыҫҡан, турғай, күгәрсен, һуйыр, ҡорҙар ғына ҡала. Улар ҡышты төрлөсә үткәрә.

Бына ҡар өҫтөнә дегәнәк баштары туҙҙырылған. Бында ҡарабаш турғай ем эҙләгән. Тегендәрәк ағас ҡабыҡтары һибелгән. Был — тумыртҡаның эше. Ул ҡабыҡ аҫтынан бөжәктәр эҙләгән. Ҡайһы бер ҡоштар миләш, балан кеүек емештәр менән туҡлана.

Кешеләр тағараҡтар эшләп, уларҙы балкондарға, парктарҙағы һәм баҡсаларҙағы ағастарға эләләр, уларға орлоҡ, ярма, икмәк валсыҡтары һибәләр. Ҡоштар йәй көндәрендә лә ошо урындарға йыш килә һәм ағастарҙы ҡортҡостарҙан һаҡлайҙар. *(108 һүҙ.)*
(«Йәш натуралист» журналынан.)

1. Тиң киҫәктәр аҫтына һыҙығыҙ.
2. *Ҡош* һүҙен ҡулланып, бер составлы һөйләм уйлап яҙығыҙ.

Контроль диктант №2

I. ҠЫШҠЫ УРМАН.

Быйылғы ҡарҙың күплеген әйтеп тә бөтөрөрлөк түгел. Тау араларын, үҙән, йылға, соҡорҙарҙы өшөмәһендәр тигәндәй итеп ябындырған. Ул ғына етмәй, ҡарағайлы ҡалын урмандың ағастарын бөркәп, уларҙың ботаҡтары өҫтөнә уҡмашып-уҡмашып һалынып торалар. Хәлһеҙерәк ағастар, көслө ҡарҙың ауырлығын күтәрә алмай, нәҙек оҙон кәүҙәләрен бөгөп ултыра. Тик ҡарт ҡарағайҙар, эре ҡайындар, көслө имәндәр, ҡаты сағандар ғына ҡалын ҡарҙың ауырлығына бирешмәй, төп-төҙ булып, күккә ҡарап ултыра бирә.

Ер өҫтөн ҡырпаҡ ҡар баҫҡандан бирле, ҙур ҡара урмандың эсенә кеше аяғы баҫмаған. Урман үтә күҙ күреме ерҙәр бөтәһе лә саф, матур, пак, йомшаҡ ҡар бөртөктәре менән ҡапланған. Улар ҡояшҡа гәлсәр бөртөктәренә оҡшап йымылдай. *(103 һүҙ.) (F. Дәүләтшиндан.)*

Контроль диктант №3

ШҮЛГӘН МӘМЕРЙӘҺЕ МЕНӘН ТАНЫШЫУ.

...«Ташлы» юл яйлап өҫкә күтәрелә. Инде күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек ҡараңғылыҡ тотҡонлоғондабыҙ. Түбәнән тамған тамсылар симфонияһына шап-шоп килгән итек тауышы һәм кейем ҡыштырлауы ғына ҡушыла. Берҙән-бер яҡтылыҡ — фонарь утының эҙенән ҡалмаҫҡа тырышабыҙ. Бына бер сталактит — үҫкән таш янында туҡталдыҡ. Бер таш түбәнән аҫҡа, икенсеһе тап шул тапҡырҙа аҫтан өҫкә «үҫә».

Бында һәр «бүлмәнең» үҙ исеме бар. Быныһы — «көмбәҙле», ә быныһы — «тамғалар» бүлмәһе. Стенаға әреле-ваҡлы тамғалар төшөрөлгән. Уларҙың күбеһе кәрзинде хәтерләтә. Шул билдәле, оштондай уҡ тамғалар икенсе ҡитғаларҙағы мәмерйәләрҙә лә табылған.

Борон бында йәшәүселәргә ҡайһылай уңайлы булған. Һыу өсөн тышҡа сығып йөрөйһө лә юҡ. Йылылыҡ йәйен дә, ҡышын да бер кимәлдәрәк һаҡлана. Тимәк, йәй — һалҡынса, ҡыш йылы була. *(109 һүҙ.) (Л. Ҡәйепованан.)*

Контроль диктант №4

II. ҠУРАЙ.

Ҡурай — сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. Белмәгән ҡайһы бер кешеләр уны ҡамыш тип атап ныҡ яңылыша. Ҡурайҙың һабаҡтары ҡырлы-ҡырлы. Бейеклеге 120—170 см. Ҡурай Урал тауының төньяғынан көньяҡ сиктәренә тиклем үҫә. Әйтергә кәрәк, ҡурай, Уралдан тыш, Алтай, Саян тауҙарында һәм Яҡут-Сахала үҫә, ә музыка ҡоралы булараҡ тик башҡорттарҙа ғына таралған. Был, әлбиттә, быуаттар төпкөлөндә ҡалған ғәжәп бер сер.

Ҡурай ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Бигерәк тә дымға байыраҡ үҙән урындарҙы хуп күрә. Ундай урындарҙа ул йоҡараҡ, ә кипкәс яңғырауыҡлыраҡ була. *(100 һүҙ.) (С. Йәнтуриндән.)*

1. Яңғыҙлыҡ исемдәр аҫтына һыҙығыҙ.
2. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

Изложение

Ҡош юлы

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла булмаған. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Уралға, Һаҡмар, Ағиҙел буйҙарына торналар килеп йәйләр булған. Элек уларҙы, Һиндостан тигән ерҙән килә, тип һөйләй торғайнылар.

Бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша башлаған, ҡайһы берҙәре, арып, ергә төшөп ҡала барған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн, ҡауырһындарын сәсеп киткәндәр. Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар барлыҡҡа килгән. Тороп ҡалған торналар ошо йондоҙҙарға ҡарап ҡайтыр булғандар. Ҡош юлы тигәндәре ана шунан ҡалған ул.

Тест биремдәре
10- сы класс (дәүләт теле буларак)

1. Кем ул Һ.Дәүләтшина?:
1. бейеүсе
2. йырсы
3. яҙыусы

2*. Кәләште ап-ак туй күлдәгенә кейендереү йолаһы 1558 йылда барлыкка килгән*.
Был һөйләм:
1. бер составлы
2. ике составлы

3. ***Ҡунакка килгәс, тәүҙә хужабикә, аҙак хужа менән күрешәләр, шунан ғына кунактар менән һаулаша башлайҙар.***
Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәлә:
1. билдәһеҙ эйәле һөйләм
2. билдәле эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4.атама һөйләм

4. ***Үҙеңә лә, башкаларға ла зыян кылма.***
Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәлә:
1. билдәһеҙ эйәле һөйләм
2. билдәле эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4.атама һөйләм

5. ***Элек <u>өй һалыусыларға</u> нигеҙ урынын ауыл карттары йәки мулла күрһәтер булған.***
Билдәләнгән һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге:
1. тултырыусы
2. анҡлаусы
3. хәл

6. ***<u>Борон</u> ауыл ҡорор алдынан ул ергә барып, туктап, йоҡлап, бер аҙ йәшәп ҡарағандар.***

Билдәләнгән һүҙ һөйләмдең ниндәй киҫәге:
1. тултырыусы
2. аңлаусы
3. хәл

7. ***Башҡорт халҡында билдәле бер миҙгелдә генә үткәрелә торған йолалар ҙа булған.***
Ҡылымдың заман формаһы:
1. үткән
2. хәҙерге
3. киләсәк

8. ***Бинаға инеүсе беренсе булып һаулыҡ һораша, сығып киткәндә лә беренсе булып хушлаша.***
Ҡылымдың заман формаһы:
1. үткән
2. хәҙерге
3. киләсәк

9. ***Йәйге көн йыл туйҙырыр.***
Ҡылымдың заман формаһы:
1. үткән
2. хәҙерге
3. киләсәк

10. ***Тап ошо айҙа, 18-нән 25-енә тиклем, ҡышҡы ҡояш торошо күҙәтелә, йәғни Ҡояш бер кимәлдә тиерлек тороп, көн оҙонлоғо яҡынса 7 сәғәткә һуҙыла.***
Айырымланған өҫтәлмәлек:
1. тап ошо айҙа
2. 18-нән 25-енә тиклем

11. Айырымланған өҫтәлмәлек булған һөйләм:
1***. Көньяҡ Уралдың иң матур бер урынында, Бөрйән районында, Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығы урынлашҡан.***
2. ***Ырымбур ҡалаһы 19-сы быуатта Урта Азия менән Европа илдәренең сауҙа үҙәгенә әйләнә***.
3. ***20-се быуаттың утыҙынсы, ҡырҡынсы йылдарында тәүҙә ҡалала, аҙағыраҡ ауылдарҙа баянда уйнау тарала.***

12. Ҡушма ҡылым булған һөйләм:
1. ***В.Шөғәйепов, И.Туймаҡаев, Р.Заһретдинов, З.Мөхәйәров һәм башҡа оҫталар башҡорт музыка ҡоралдарын халыҡҡа кире ҡайтарыуға булышлыҡ итә.***
2. ***“Ҡарға бутҡаһы”, “Кәкүк сәйе” кеүек халыҡ йолаһы уйындарында ла ҡумыҙҙы яратҡандар.***

13. Парлы һүҙ булған һөйләм:
1. ***Бына шулай ҡурайсы ҡурайының моңо менән кешеләрҙе үлемдән алып ҡалған, ҡайғылының ҡайғыһын баҫҡан, ти.***
2. ***Урман-тауҙы ҡыҙырып эҙләй торғас, йыртылып бөткән ҡанлы өҫ кейемдәрен генә тапҡандар.***

14***. “Мөхәббәт-ул, әйтерһең дә, утлы йәшен,***
Һанап-һорап тормай һис бер кемдең йәшен,
Һүнмәҫ ялҡын менән ялмай ҡартын-йәшен;
Көйҙөрөр тип ҡурҡһаң әгәр, ҡас һин, йәшен,
Ҡоя күрмә тик аҙаҡтан күҙең йәшен!
Мөхәббәт-ул, әйтерһең дә, утлы йәшен”. (Р.Назаров)
Билдәләнгән һүҙҙәр:
1. синонимдар
2. антонимдар
3. омонимдар

15. Тура телмәрле һөйләм:
1. ***Ҡараңғынан: “Һаумы, Салауат!”-тигән тауыш ишетелде.***
2. ***“Хоккей”һүҙе француз телендә “кәкре таяҡ” мәғәнәһендәге “хоке”һүҙенән килеп сыҡҡан.***
3. ***Эше юҡтың ҡәҙере юҡ.***

16. ***Нисек, ни рәүешле, ҡайһылай*** һорауҙарына …яуап бирә:
1. ваҡыт хәле
2. урын хәле
3. рәүеш хәле

17. Хәбәр һөйләм аҙағында ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?
1. һыҙыҡ
2. нөктә
3. ике нөктә

Яуаптар

10-сы класс (дәүләт теле буларак)

1. 3
2. 2
3. 2
4. 2
5. 1
6. 3
7. 1
8. 2
9. 3
10. 2
11. 1
12. 1
13. 2
14. 3
15. 1
16. 3
17. 2

11 КЛАСС

Контроль диктант №1

I. ӨС БЫУАТЛЫҠ ТАРИХ.

Бөрө йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған урынында, унын аҡ һыуҙарында көҙгөләй сағылып, Башҡортостандың иң боронғо ҡалаларының береһе Бөрө урынлашҡан.

1663 йылда батша Алексей Михайлович әмере буйынса Өфө воеводаһы Ф. И. Сомов һалдыра башлай уны. Башҡортостан Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан һуң, хозур тәбиғәтле был төбәктәргә урыҫтар күпләп килеп ултыра башлай. Ауылдар, сиркәүҙәр һалдырыуға ризаһыҙлыҡ белдереп, башҡорттар Архангельский ауылын яндыралар. Унын урынына Бөрө ҡалаһы ҡалҡып сыға. Өфөнән 98 километр төньяҡта урынлашҡан ҡәлғә-ҡала төбәктәге һыу юлдарын да контролдә тота. VIII быуаттың икенсе яртыһына тиклем ул батша дәүләтенең көнсығыштағы форпосы була.

1774 йылда Салауат Юлаев етәкселегендәге башҡорттар Бөрөнө штурм менән ала һәм, янғын сығып, ҡала бөтөнләй янып бөтә яҙа. Ике йылдан ул ҡайтанан аяҡҡа баҫтырыла. *(111 һүҙ.)* *(Башҡортостан календарынан.)*

1. Беренсе һөйләмгә синтаксик анализ яһағыҙ.
2. Һәр һөйләмдә эйә менән хәбәр аҫтына һыҙығыҙ.
3. Ҡушма һөйләмдәрҙе табып, төрөн билдәләгеҙ.

Контроль диктант №2

БАШҠОРТ ЕГЕТЕ ШАКИРЙӘН.

Батырҙарҙың батыры тигән даны таралған һәм урыҫ фамилияһы менән энциклопедияларға ингән Александр Матросовтың башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов булыуы яңыраҡ ҡына тулыһынса асыҡланды.

Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Ул 1934 йылда уҡ тыуған ауылынан сығып китә, сигандар, моряктар араһында йөрөй. Унан һуң Ульяновск өлкәһенең Димитровград балалар йортона барып эләгә. Һуңынан Һамар, Һарытау ҡалаларына барып юлыға. Унда Саша, паспорты булмағанлыҡтан, ҡулға алына һәм Өфө балалар хеҙмәт колонияһына ебәрелә, ә 1942 йылдың октябрендә фронтҡа китә.

Балалар йортонда һәм колонияла йәшәгән сағында Шакирйән өс тапҡыр тыуған ауылына ҡайтып китә. Һуңғы тапҡыр

килгәнендә ул атаһына: «Үлеп ҡалһам, мине Александр Матросов исеме менән эҙләрһегеҙ», — тип әйтә. *(109 һүҙ.) (Р. Насировтан.)*

Контроль диктант №3

I. НЕФРИТ — КҮК ТАШЫ.

Был һирәк осрай торған минерал алтындан артығыраҡ һаналған замандар ҙа булған. Ҡытайҙа Кунь-Лунь — «Нефрит тауы» бар. Бөтә Азияла күк ташы тик шунда ғына табылған. Беҙ кемделер маҡтаған саҡта күп ваҡыт «алтын» һүҙен ҡулланабыҙ, «алтын ҡуллы», «алтын кеше» тип һөйләйбеҙ, «алтыным» тип яратабыҙ. Ә Ҡытайҙа был ваҡытта «нефрит» һүҙен ҡулланалар. Унда «нефрит ҡуллы», «нефрит күңелле», «нефриттай гүзәл» тип маҡтайҙар. Спортта еңеүселәрҙе бүләкләгәндә, Ҡытайҙа өсөнсө урынды алған кешегә — фил һөйәгенән эшләнгән, икенсе урынды алғанға — алтындан ҡойолған, беренсе урынды алғанга нефрит биҙәүестәр бирелгән.

Нефрит Уралда, Башҡортостанда ла табыла. Иң юғары сифатлы нефрит бында һирәк осраһа ла, Учалы районындағы нефрит үҙенсәлекле матурлығы менән айырылып тора. Ул ҡарағусҡыл йәшел төҫтә, һәйбәт эшкәртелә. *(108 һүҙ.) (М. Моталовтан.)*

Контроль диктант №4

I. ҠЫРСЫНТАШ.

Беҙҙең ауылдың иң оло урамы Дим буйлап һуҙылған. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, ауыл уртаһынан картуф баҡсаларын йырып, Дим буйына бер генә тыҡрыҡ төшөп китә. Бына шул тыҡрыҡтан төшһәң, тап Ҡырсынташҡа килеп сығаһың да инде.

Ололар уны Ҡырсынташ тип йөрөтһә лә, беҙ, бала-саға, уның исемен ҡыҫҡартып «Ташлыҡ» тип кенә атай торғайныҡ. Ауылыбыҙҙа кем генә тыуып үҫмәһен — бөтәһенең дә яҙмышы ошо Ҡырсынташ менән ныҡ бәйләнгәндер, моғайын.

Дим һыуына һөҙәк кенә барып төшкән яры ваҡ ҡына ҡара ҡомдан торһа ла, һыуға инеү менән һыу төбөнә һибелгән төрлө төҫтәге мәрйен булып, ҡырсынташ йәйелеп китә.

Йәй булһа бала-саға ошо Ҡырсынташтан ҡайта белмәҫ, — көнө буйы һыу инер, уйнар, балыҡ ҡармаҡлар ине. Ололар ҙа, эштән арып ҡайтыуҙарына ҡарамаҫтан, киске эңерҙә булһа ла төшөп, саң-туҙандарын йыуып, ҡойоноп сығырҙар ине. *(122 һүҙ.) (Ф. Ҡунафиндан.)*

1. Ҡушма һөйләмдәр аҫтына һыҙығыҙ.
2. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙең төрөн билдәләгеҙ.

Изложение №1

VI. СӘСКӘ, Ә ҮҘЕ СӘҒӘТ.

Батыр менән Гөлнәзирә урманға еләк йыйырға барҙы. Икеһе лә тырыҙын тултырырға тырышты.

— Ҡайта һалайыҡ, ямғыр килә, — тине Батыр ҡапыл ғына. — Бына, сәскәләргә ҡара әле: бәпембә күҙҙәрен йомған, япраҡтары һәленеп төшкән, туҡранбаш башын эйгән.

Ысынлап та, тиҙҙән ҡойоп ямғыр яуа башланы.

— Сәскәләр барометр кеүек икән дә! — тине Гөлнәзирә, ағас аҫтына йәшенеп.

— Улай ғына тиһеңме, сәскәләргә ҡарап ваҡытты ла белеп була. Мәҫәлән, ҡыңғырау сәскә таж япраҡтарын иртәнге етелә аса. Ябай ғына картуф сәскәһе лә — дөп-дөрөҫ сәғәт. Ул теүәл етелә асыла ла көндөҙгә өстә йоҡлай башлай.

Ямғыр нисек тиҙ килгән булһа, шулай ашығып китеп барҙы. Гөлнәзирә менән Батыр ҡайтырға сыҡты. Йәһәтерәк картуф сәскәһен ҡарарға ине: сәғәт нисә икән? *(«Аҡбуҙат» журналынан.)*

Изложение №2

VIII. ЙЫЛЫ ЯҠҠА КИТЕҮ.

Ҡошсоҡ әсәһе менән йылы яҡҡа китергә әҙерләнеп бөттө. Дуҫтары менән дә хушлашырға онотманы. Тик йылы яҡҡа китеү шатлығына ниндәйҙер моңһоулыҡ та ҡушылды.

— Әсәй!.. Йылы яҡтан беҙ тиҙ ҡайтырбыҙмы?

Әсәһе йылмайҙы:

— Әле генә һинең тиҙерәк йылы яҡҡа киткең килә ине.

— Киткем килә лә...

— Шулай булғас...

— Дуҫтарымдан, аҡ ҡайындан, оябыҙҙан айырылғым килмәй, һағынырмын...

— Ҡайҙа ғына йөрөһәң дә, һәр ваҡыт үҙенә тартып торған Тыуған ил бар шул, ҡошсоғом. Уны һағынаһың да, тиҙерәк кире урап ҡайтыр өсөн талпынаһың да. Аҡ ҡайының, күк сәскәң, баш өҫтөндәге күгең, аҫты ялтырап ятҡан яҡты күлдәр, күкһел тауҙар — һинең Тыуған илең. Уны бер нәмәгә лә алмаштырып булмай. Яҙ етеү менән, беҙ ошо ергә кире әйләнеп ҡайтырбыҙ, аҡ ҡайын ботаҡтарын тирбәтеп, Тыуған ил тураһындағы мин өйрәткән йырҙарҙы йырларһың. Хуш бул, Тыуған ерем!..

Сыйырсыҡ балаһы тулҡынланды:

— Хуш бул, һау бул, Тыуған ерем! — тип бер туҡтауһыҙ әсәһенең һүҙен ҡабатланы. *(А. Йәғәфәрова.)*

Тест биремдәре

Тест №1

1.*Һәр эште үҙ ваҡытында үтә.*Бер составлы һөйләм төрөн билдәлә.
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
2.*Ағиҙел аша яңы күпер һалғандар***.**
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
3. *Бөгөн бик арытылды***.**
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
4. *Йәмле Ағиҙел буйҙары.*
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
5. Ҡайһы һөйләм тик эйә составынан ғына тора?
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
6.Хәбәре тик өсөнсө затта килһә,ниндәй һөйләм була?
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
7. Хәбәре тик беренсе һәм икенсе затта ғына килә**.**
А. Билдәле эйәле **Б.**Билдәһеҙ эйәле **В.** Эйәһеҙ **Г.**Атама.
8. *Мин уны,Төхфәт ҡартты,электән белә инем.*Ниндәй эйәрсән киҫәк айырымланған?
А. Өҫтәлмәлек **Б.** Аныҡлаусы **В.** Хәл әйтеме**.**
9. - Мине көтөһегеҙме?
-Эйе,көтөрбөҙ.
А. Тулы һөйләм **Б.**Кәм һөйләм
10. –Һеҙ ҡайҙа бараһығыҙ?
-Беҙ мәктәпкә барабыҙ.
А. Тулы һөйләм **Б.**Кәм һөйләм

Тест №2

1. Ике составлы һөйләм булған рәт:
1. ***Күсер ҡоштар сентябрҙә көньяҡҡа китеп бөтә.***
2. ***Ноғман Мусин әҫәрҙәрен яратып уҡыйҙар.***
3. ***Яҡшы уҡырға кәрәк.***

2. Эйә менән хәбәрҙән генә торған һөйләм:
1. тарҡау һөйләм була
2. йыйнаҡ һөйләм була

3. Бер составлы һөйләм бирелгән рәт.

1. ***Йыр ул-Ҡояш!.***
2. ***Сауд Ғәрәбстанында бер генә йылға ла юҡ.***
3. ***Беләгеңә таянма, белемеңә таян.***
4. Буранбай-Йәркәй, Ишмөхәмәт, Ерәнсә, Ҡобағош. Улар:
1. сәсәндәр
2. яҙыусылар
3. шағирҙар

5. Атама һөйләм булған рәт:
1. ***Әйтер һүҙем-иҫкән елдәрҙә,***
Күрер күҙем-үҫкән гөлдәрҙә…(Р. Ғарипов)
2. ***Мәғрүр Урал. Данлы һәм шанлы Урал тауҙары…(***Р.Шәкүр)
3. ***…Йыр яңғырай.*** (Р.Назаров)

6. Билдәләнгән һөйләмдәрҙең ҡайһынyһы кәм һөйләм? :
1***. –Ҡурай!***
-Әү.
-Ҡайҙа үҫтең?
-***Урманда***. (Н.Мусин)
2. ***–Һин өйгә эшеңде эшләнеңме?***
-Эйе, мин өйгә эшемде эшләнем.

7. ***Беҙҙең халыкты борон-борондан йырсы халык, бейеүсе халык тип*** йөрөтәләр
Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәлә:
1. билдәһеҙ эйәле һөйләм
2. билдәле эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4. атама һөйләм

8***. <u>Ғүмер көҙөм.</u> Иртә әле һиңә-***
Миҙгел төҫө түгел ак сәстәрем. (Р.Мифтахов)
Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәлә:
1. билдәһеҙ эйәле һөйләм
2. билдәле эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4. атама һөйләм

9. “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!”(М.Аҡмулла)
Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәлә:
1. билдәһеҙ эйәле һөйләм
2. билдәле эйәле һөйләм
3. эйәһеҙ һөйләм
4.атама һөйләм

10. ***“Батырмын тип кем әйтмәй,-***
Яу килгәндә йүне юҡ;
Сәсәнмен тип кем әйтмәй,-
Дау килгәндә өнө юҡ”.
Был юлдарҙың авторы:
1.Һабрау сәсән
2. Ҡобағош сәсән
3. С.Юлаев

11***.”Ер шарының картаһына***
Ҡараһаң яҡшы ғына…”
1. М.Кәрим
2. Р.Бикбаев
3. Н.Нәжми
Яуаптар
Тест № 2
11-се класс (дәүләт теле буларак)
1.1
2.2
3.3
4.1
5.2
6.1
7.1
8.4
9.3
10.3
11.1